# Уйын — тормош мәктәбе

***Башҡортмо һин, татармы һин***
***Унда түгел мәсьәлә.***
***Башҡорттан да, татарҙан да***
***"Урыҫ" тыуа, вәт бәлә, – тип яҙа Башҡортостандың халыҡ шағиры Әнғәм Атнабай.***



Донъяла һәр халыҡтың үҙенең ҡабатланмаҫ мәҙәниәте, изге тарихы, йәшәү рәүеше һәм туған теле бар. Һәр тел ул халыҡтың көҙгөһө, уның йәмғиәттәге һәм шәхси үҫеше. Донъяға ауаз һалған һәр сабый үҙенең туған телендә "атай", "әсәй" тип әйтергә тейеш, тип һанайым мин дә.

Башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәрен, рухи мираҫын ҡәҙерләп һаҡлаған Баймаҡ ерендә йәшәйем. Ҡалала эшләп килгән "Толпар" балалар баҡсаһы тәрбиәсеһемен. Быйыл башҡорт төркөмөнә балалар ҡабул иттем. Сабыйҙарҙың телдәре саҡ асылып килә. Ләкин аяныслыһы – улар иң ғәзиз, ҡәҙерле кешеләрен "әсәй", "атай" тип түгел, ә "мама", "папа" тип оҙатып ҡала һәм ҡаршы ала. Ә бит туған телде һаҡлап ҡалыу, уны киләсәк быуынға тапшырыу һәр бер милләт вәкиленең изге бурысы.

Балалар менән шөғөлләнгәндә күберәк дидактик, лексик күнегеүҙәр алырға тырышам. Ролле, йырлы-бейеүле, хәрәкәтле, коммуникатив уйындар балаларҙа етеҙлек, зирәклек сифаттары тәрбиәләй, физик яҡтан сыныҡтыра, ритмлы һүҙ, хәрәкәт, көй аша ижади һәләт асыла.

Балалар эшмәкәрлек барышында үҙҙәрен асып бөтөрмәскә мөмкин, ә төрлө уйындар ваҡытында быға шарттар тыуҙырыла. Уйын ваҡытында үҙҙәрен ҡыйыуыраҡ тота, үҙ-үҙҙәренә һәм иптәштәренә ышаныстары арта. Йәш үҙенсәлегенә ҡарап, методик яҡтан дөрөҫ уйланылған уйын ғына туған телгә ҡарата һөйөү тәрбиәләй, ҡыҙыҡһыныу уята, телмәр күнекмәләрен үҫтерә. Шул уҡ ваҡытта уйындар балаларҙың төрлө яҡтан үҫешен тәьмин итә, ижади һәләттәрен, хыялдарын байыта, фекер әүҙемлеген һәм зиһендәрен үҫтереүгә ныҡлы этәргес булып тора. Эш тәжрибәмдән күренеүенсә, уйындарҙа балалар әүҙем була, теләп һөйләшә. Яңы һүҙҙәрҙе телмәргә индереү, балаларҙың һүҙ байлығын асыҡлау, тулыландырыу эшен төрлө режим мәлендә, уйындарҙа алып барам.

Дидактик уйындарҙы өс төркөмгә бүлеп ҡулланам: предметлы, өҫтәл, һүҙле. Предметлы уйындарҙа уйынсыҡтар, төрлө әйберҙәр ярҙам итә. Уларҙы балаларҙан сағыштыртам, оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын табырға өйрәтәм (төҫө, формаһы, ҡулланылышы). Өҫтәл уйындарын да уйнарға ҡыҙыҡһыусы кескәйҙәр бар (парлы һүрәттәр, лото, домино). Шулай уҡ төҫө, формаһын асыҡлау, һүрәттәрҙе төркөмләү, билдәле бер тәртиптә урынлаштырыу, өлөштәрҙән тулы рәсем йыйыу. Һүҙле уйындарҙа уйын һүҙҙәргә һәм хәрәкәттәргә ҡорола. Өндәрҙе дөрөҫ ишетеү, әйтеү күҙ уңында тотола. Һүҙлек байытыла, бәйләнешле телмәр үҫтереүгә иғтибар бирелә. Айырым өндәрҙе дөрөҫ, асыҡ әйттереү маҡсатында "Беҙҙең ишек алдында" тигән уйынды ойошторам. Бының өсөн йорт ҡоштарының һәм хайуандарының һүрәттәрен ҡулланам. Был уйын хәтерҙе үҫтереүгә булышлыҡ итә, иғтибарлылыҡ, бер үк ваҡытта хайуандарға ҡарата мәрхәмәтлелек тәрбиәләй.

Мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн уйын — тормош мәктәбе. Әлбиттә, был уйындарҙы уйнатыр алдынан мин үҙ алдыма маҡсат ҡуям. Кескәйҙәрҙә туған теле менән ғорурланыу хисе тәрбиәләү, халҡыбыҙҙың мәҙәниәте, йәшәйеше менән таныштырыу. Туған телгә өйрәткәндә аҡрынлап телмәргә яңы һүҙҙәр индерергә, яңы һөйләм төрҙәре ҡулланырға тырышам. Тәжрибәмдән сығып шуны әйткем килә, әгәр ҙә бала көндәлек тормошта туған телендә һөйләшһә генә, балалар баҡсаһында туған телде өйрәнеү күпкә уңышлы була, һөҙөмтәләр бирә.

Бары тик уйындар аша ғына бала күп яҡлы мәғлүмәт ала. Тимәк, улар дөрөҫ ойошторолғанда ғына, тәрбиә һәм туған телгә һөйөү уятыу отошло була.

**А. БАЙМОРАТОВА,**
**"Толпар" балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе.**